Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы Яңауыл ҡалаһы лицейы

**Тема: Рәшит Ниғмәти. “Беҙ тыныслыҡ яҡлы” шиғыры.**

**Уҡытыусы эшмәкәрлегенең маҡсаты :** уҡыусыларҙы башҡорт телендә аралашырға,белем алырға,үтелгәндәргә таянып Ватан төшөнсәһе, уны яҡлау,һаҡлау кәрәклеген,тыныслыҡтың ҡәҙерен белеүҙе уҡыусыларға төшөндөрөү;

Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының ижады менән ҡыҙыҡһыныу уятыу;

интеллектуаль шәхес булып үҫеүен тәьмин итеү

**Дәрес тибы:** бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе.

**Көтөлгән шәхси,метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре:**

**Шәхси үҫеш кимәле:**белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу;

ижади-эҙләнеү эше менән шөғөлләнеү;

телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырыуға ынтылышты үҫтереү.

**Метапредмет кимәле**: төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү, алған белемде системалаштырыу;

башҡаларҙы тыңлау,үҙ фекереңде яҡлай белеү;

башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында белемде тулыландырыу;

үҙ-үҙеңә баһа биреүҙе тормошҡа ашырыуҙы дауам итеү.

**Предмет үҙләштереү кимәле:** тасуири,етеҙ,шыма уҡыуға өлгәшеү;

текст,китап менән эш итеү алымдарын өйрәнеүҙе дауам итеү,кәрәкле материал туплау;

бәйләнешле телмәр үҫтереү;үтелгән орфограмма ҡағиҙәләрен ҡабатлау.

| | |
|---|---|
| Маҡсат | Р.Ниғмәтиҙең ижады менән  ҡыҫҡаса  таныштырыу.Тасуири уҡыу   күнекмәләрен үҫтереү. |

| | |
|---|---|
| | Һөйләм телмәрен, фекерләү һәләтен, анализлау, синтезлау күнекмәләрен үҫтереү.<br>Баланы шәхес итеп үҫтереү,кешелек сифаттары тәрбиәләү.<br>Батырлыҡ,илһөйәрлек рухы тәрбиәләү,Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары менән ғорурлана белеү хистәрен тәрбиәләү. |
| Планлаштырылған һөҙөмтә | Бөйөк Ватан һуғышы тураһында белгәндәрҙе тулыландырыу; эҙләнеү эше менән шөғөлләнеүҙе дауам итеү. |
| Төп төшөнсәләр | Еңеү,тыныслыҡ |
| Предмет-ара бәйләнеш | Башҡортостан культураһы һәм тарихы |
| Эште ойоштороу төрҙәре | Фронталь, индивидуаль, парлап эшләү.Дистанциала эшмәкәрлек. |
| Сығанаҡтар :<br>- төп<br><br>- өҫтәлмә | Толомбаев Х.А. 4-се класс өсөн дәреслек<br>Компьютер, экран, презентация, Р.Ниғмәти портреты, “Беҙ тыныслыҡ яҡлы “ шиғыры<br><br>Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған шағирҙар,яҙыусылар тураһында мәғлүмәт,Рәсәй тарихы,рус әҙәбиәте (Б.Полевой “Повесть о настоящем человеке” |

| Дәрестең төҙөлөшө | Уҡыусылар эшмәкәрлеге | Уҡытыусы эшмәкәрлеге | Уҡыусыларға бирелгән эштәр | Көтөлгән һөҙөмтә | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | Предмет | УУЭ (универсиаль уҡыу эшмәкәрлеге) |
| Ойоштороу моменты | Артикуляцион күнегеү.<br>Болондарҙы күмеп майҙың Нәфис гөлөнә.<br>Еңеү көнө балҡып килде,<br>Тыуған илемә.<br>(Уҡыусыларҙың яуаптары)<br>Еңеү – [й э ң э ү] | -Слайдтан шиғыр юлдарын уҡып күрһәтеү.<br>-Был шиғыр юлдары нимә тураһында?<br>-Быйыл Еңеүгә нисә йыл була?<br>-Беҙ бөгөн һеҙҙең менән нимә тураһында | а)Шиғырҙан өҙөктө уҡытыусы уҡый.<br>б)Бергәләп хор менән уҡыу.<br>в) Тик һуҙынҡы өндәрҙе генә тәртип буйынса уҡыу.<br>г)Ауыр орфограммалы һүҙҙәрҙе табыу.<br>Еңеү,гөлөнә. | Тасуири уҡыу.<br>1-се слайд<br><br><br>Һуҙынҡыларҙы дөрөҫ әйтеү күнегеүҙәре. | **Шәхси уҡыу эшмәкәрлеге.**<br>Үҙ фекеренде дөрөҫ әйтә белеү.<br>Төркөмдәрҙә эшләй белеү.<br>Үҙ фекеренде раҫлай белеү.<br>**Танып-белеү эшмәкәрлеге.**<br>Тейешле мәғлүмәтте табыу һәм айырып ала белеү.<br>Төрлө рәүештә бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм аңлау.<br>Уҡығанды анализлау. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **! Һүҙ башында е хәрефе йә ишетелгән урында ғына яҙыла.**<br>**Миҫалдар килтереү: Ер.еләк,ем,егет** | һөйләшәсәкбеҙ? | | **Еңеү** һүҙенә хәреф-өн анализы яһау. Ауыр орфограмманың ҡағиҙәһен иҫкә төшөрөү(е хәрефе)<br>2-се слайд<br><br><br>Хәтер китабы менән таныштырыу.<br>3-сө слайд | **Коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеге.**<br>Башҡаларҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау .<br>Үҙ фекереңә ышандыра белеү.<br>Башҡаларға аңлайышлы һөйләй белеү. |
| Актуалләш<br>тереү. Яңы материалды үҙләштереүгә<br>теләк тыуҙырыу | Уҡыусыларҙың яуаптары тыңлана | -Был шиғырҙа ниндәй Еңеү<br>тураһында һүҙ бара?<br>- Һеҙ Бөйөк Ватан һуғышы тураһында нимәләр беләһегеҙ? | Яуаптар тыңлана. |  | **Регулятив уҡыу эшмәкәрлеге.**<br>Дәрестең мҡсатын ҡуя белеү.<br>Үҙ фереренде теүәл әйтә белеү.<br>Дөрөҫтән –дөрөҫ түгелде айыра белеү.<br>Таныш араһынан таныш булмағанды айыра белеү.<br>Һөҙөмтәләр сығара белеү.<br>Иптәшеңә булышыу,ярҙам күрһәтә белеү.<br>**Коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеге.** |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | -Һеҙҙең ғаиләгеҙҙән был һуғышта ҡатнашҡан туғандарығыҙ бармы?Һеҙ улар тураһында нимәләр беләһегеҙ?<br><br>-Яңауыл районының Хәтер китабын күргәнегеҙ бармы?<br><br>(Слайдта Хәтер китабы күрһәтелә) | | | Башҡаларҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау .<br>Үҙ фекереңә ышандыра белеү.<br>Башҡаларға аңлайышлы һөйләй белеү. |
| Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу | -Ватан беҙ йәшәгән ил – Рәсәй.<br><br>-Тыныслыҡ –ул һәр көн тыуған | -Балалар һеҙ Ватан тигән төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ?<br><br>-Тыныслыҡ нимә | -Беҙ бөгөн һеҙҙең менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Ниғмәтиҙең<br><br>“Беҙ тыныслыҡ | Р.Ниғмәтиҙең портретын күрһәтеү.<br><br>4-се слайд | **Танып-белеү эшмәкәрлеге.**<br>Тейешле мәғлүмәтте табыу һәм айырып ала белеү.<br>Төрлө рәүештә бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм аңлау.<br>Рәсемдәр һәм иллюстрациялар ярҙамында һорауҙарға яуап таба |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | көнгә шатланыу<br><br>2. Уҡыусылар кәрәкле мәғлүмәтте әҙер таблицаға тултырып бара | ул?<br>-Тыныслыҡ ни өсөн кәрәк?<br><br>2.Уҡытыусы ҡыҫҡаса таныштырып бара .Хронологик таблицаны тултырыуҙа булыша. | яҡлы”шиғыры менән танышырбыҙ.<br>Ә хәҙер Р.Ниғмәтиҙең тормошо юлы һәм ижады тураһында ҡыҫҡаса танышып үтербеҙ.<br><br>Рәшит Ниғмәти (Рәшит Ниғмәтулла улы Ниғмәтуллин) 1909 йылдың 9 февралендә хәҙерге Куйбышев өлкәһе Больше-Черниговский районы Диңгеҙбай ауылында донъяға килә. Йәшләй етем ҡалып, балалар йортонда тәрбиәләнә. 1924 йылда Өфөгә килеп, В. И. Ленин исемендәге етем балалар мәктәбенә уҡырға инә. 1931 йылда Өфө рабфагын тамамлағас, Р. Ниғмәти Туймазы районы гәзитендә эшләй. 1934 — 1936 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан | <br>Рәшит Нигмәти (1909-1959) | белеү.<br>Уҡығанды анализлау.<br>**Коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеге.**<br>Башҡаларҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау .<br>Үҙ фекереңә ышандыра белеү.<br>Башҡаларға аңлайышлы һөйләй белеү. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | Өфөгә күсеп, республика гәзиттәрендә,<br>Башҡортостан Яҙыусылар союзында эшләй.<br>Рәшит Ниғмәтиҙең беренсе шиғырҙары 1926 йылда “Башҡортостан”, “Башҡортостан йәштәре” гәзиттәрендә баҫыла. 1933 йылда шағирҙың “Кереш” тигән тәүге шиғырҙар китабы сыға. Рәшит Ниғмәти 1939 йылда иң популяр әҫәрҙәренән һаналған “Йәмле Ағиҙел буйҙары” тигән лиро-эпик поэмаһын ижад итте..<br>Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Р. Ниғмәти ижады айырыуса әүҙемләшә һәм яңы баҫҡысҡа күтәрелә. Ул “Тыуған илем өсөн”, “Әсә һүҙе”, “Үс ал, патриот!” шиғырҙары, “Үлтер, улым, фашисты!”, “Һинең кәләшеңдең хаттары” поэмаларын яҙа.. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | Р. Ниғмәти Хеҙмәт<br>Ҡыҙыл Байраҡ, ике тапҡыр “Почет Билдәhе” ордендары менән наградланды. 1959 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. | | |
| Уҡыу мәсьәләhен сисеү. | 1.Һүҙлек өҫтөндә эш.Уларҙы hүҙлек китабынан үҙ аллы табыу hәм hүҙлек дәфтәренә яҙып ҡуйыу.<br>2.Шиғыр менән танышыу.<br><br>Теләүселәр диктор булып уҡыйҙар. | Яңы hүҙҙр менән таныштырыу.<br>Ҡиммәт, яра,ҡултыҡ таяҡ<br><br>2.Шиғырҙы уҡытыусы тасуири яттан hөйләп ишеттерә.<br><br>Зоя Космодемьянская тураhында белешмә биреү.<br>Алексей Маресьев тураhында белешмә биреү. | Һүҙлек өҫтөндә эш.<br>Ҡиммәт-дороже<br>Яра- 1. рана<br>2.колет (утын яра)<br>Ҡутыҡ таяҡ- костыль<br>Был hүҙҙәр менән hөйләмдәр төҙөү.<br><br>2. Шиғыр менән танышыу.<br>а) Эстән уҡып сығыу.<br>б) Хор менән уҡыу.<br>в) Шиғырға комментарийлы-строфалы анализ эhау.<br>-кем ул Зоя?Маресьев тураhында нимәләр беләhегеҙ?<br>г)”Буксир” менән уҡыу.<br>д)”Диктор”уйынын ойошторою. | 5-се слайд<br><br><br>6-сы слайд<br><br><br>7-се слайд | **Коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеге.**<br>Башҡаларҙың телмәрен ишетеү hәм тыңлау .<br>Үҙ фекереңә ышандыра белеү.<br>Башҡаларға аңлайышлы hөйләй белеү.<br>**Танып-белеү эшмәкәрлеге.**<br>Тейешле мәғлүмәтте табыу hәм айырып ала белеү.<br>Төрлө рәүештә бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеү hәм аңлау.<br>Уҡығанды анализлау.<br>Өҫтәлмә әҙәбиәт менән танышыуға теләк тыуҙырыу. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Борис Полевойҙың “ Повесть о настоящем человеке” китабы менән тапныштырыу. | |  | |
| Физминут | “Шайморатов генерал” йырына төрлө хәрәкәттәр башҡарыу | “Шайморатов генерал” йырына төрлө хәрәкәттәр башҡарыу | “Шайморатов генерал” йырына төрлө хәрәкәттәр башҡарыу | Музыка  ҡуйыла | **Шәхси уҡыу эшмәкәрлеге.** Төркөмдәрҙә эшләй белеү. |
| Яңы белемдәрҙе нығытыу | Бөйөк Ватан һуғышы тураһында белгәндәрҙе нығытыу. | -Картиналарҙа нимәләрҙе күрәһегеҙ? | Темаға бәйле картиналар күрһәтеү. | 8-се,9-сы слайдтар. | **Коммуникатив уҡыу эшмәкәрлеге.** Башҡаларҙың телмәрен ишетеү һәм тыңлау . Үҙ фекереңә ышандыра белеү. Башҡаларға аңлайышлы һөйләй белеү. |
| Рефлексия. Яңы белемдәрҙе үҙ аллы ҡулланыу һәм тикшереү | Һалдат булып кейенгән уҡыусы сығышы. **Күптән инде ,күптән күмгәндәрҙер, Ә мин иҫән,һаумын был ерҙә. Ғәжәпме ни** | Уҡытыусы һүҙе. -Бөйөк Ватан һуғышы-оло тарихи ваҡиға.Тарихлы халыҡ-бәхетле халыҡ.Ул шул тарихи үткәнен һаҡлауы,ирек,бәхет өсөн | | | **Танып-белеү эшмәкәрлеге.** Тейешле мәғлүмәтте табыу һәм айырып ала белеү. Төрлө рәүештә бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеү һәм аңлау. Уҡығанды анализлау. |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **окоптарҙа үткән Һалдат ғүмере өсөн үлемдәр. Тыуған илдең намыҫын һаҡлауҙан да Артыҡ бәхет бармы донъяла? Ватан-әсә!Унын йәшәүе өсөн Ҡыҙғанмайбыҙ ҡайнар ҡанды ла.** | көрәшеүе,улдарын ололауы,онотмауы менән бәхетле.Бына ошондай батырҙар менән ғорурлана Рәсәй. Башҡортостандың да бик күп егет-ҡыҙҙары батырлығы тураһында әҫәрҙәр күп. | | | |
| Баһалау | Баһалар ҡуйыу | Баһалар ҡуйыу | Баһалар ҡуйыу | | **Шәхси уҡыу эшмәкәрлеге.** Үҙеңдең ,иптәшеңдең эшенә дөрөҫ баһа бирә белеү |
| Уҡыу эшсәнлеген йомғаҡлау | Өйгә эш яҙып алыу. | Өйгә эш биреү. | Өй эше төрлө кимәлдә бирелә. 1.Шиғырҙы тасуири уҡырға. 2. Проект эше өсөн фотолар,матеиралдар алып килергә 3.Башҡортостандың һуғыш яланында ятып ҡалған шағирҙар,яҙыусылар тураһында мәғлүмәт алып килергә. | | |